*Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА,*
*филология фәндәре докторы*

# Һәр кемдең үҙ өлөшө...

Арҙаҡлы ғалим Әкрәм Бейешевтың атаһы, Ғибаҙулла Абдулла улы — билдәле уҡытыусы, тарихсы, тыуған яҡты өйрәнеүсе. Ул бөтә балаларында, шул иҫәптән Әкрәмдә лә, белемгә, тарихҡа ҡыҙыҡһыныу, милли рух уятһа, әсәләре Миңлебикә Әбделғәлим ҡыҙы уларға күңел нескәлеге, күңел байлығы һала. Ул замандағы бөтә уҡытыусы балалары кеүек (белеүебеҙсә, уҡытыусыларҙы мәктәптән мәктәпкә күсереп йөрөтөү тәртибе булған), Әкрәм Бейешев төрлө мәктәптәрҙә белем ала. Ҡаты ауырып китеү сәбәпле, унынсы синыфты бөтөрә алмай ҡала. 1943 йылда армияға алалар һәм ул 1950 йылға тиклем хеҙмәт итә. Венала хеҙмәт иткән сағында Әкрәм Бейешев киске мәктәпкә йөрөй, аттестат ала һәм киләсәктә юғары уҡыу йортона инергә ҡарар итә. Әммә армиянан ҡайтыуына вузға ҡабул итеү тамамланған була. Ул "Совет Башҡортостаны" гәзитендә эшләй башлай. Гәзит эшен Әкрәм Ғибаҙулла улы яратып, бөтә күңелен биреп башҡара. Уның мәҡәләләре актуаллеге, бай теле менән оло быуын журналистарына, гәзит уҡыусыларына оҡшай. Баш мөхәррирҙән маҡтау һүҙҙәре лә ишетә. Әммә юғары белем алыу, һәм уны мотлаҡ Мәскәүҙә алыу хыялы Әкрәм Бейешевҡа тынғы бирмәй. Шулай итеп, ул 1951 йылда Мәскәү дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә. Фән төпкөлдәренә сумып уҡыған, хыял, мөхәббәт диңгеҙендә йөҙгән шаулы студент йылдары күҙ асып йомғансы үтеп тә китә. Буласаҡ мәшһүр ғалим Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына эшкә ҡайта. Институтта ул телсе-ғалим, һүҙлексе, төркиәтсе булып формалаша, исемен донъя кимәленә күтәргән иллеләп фәнни хеҙмәт ижад итә. Ошо хеҙмәттәр араһында уның "Төрки телдәрендә беренсел оҙон һуҙынҡылар" монографияһы үҙенең фундаменталлеге менән айырылып тора һәм тюркология, алтаистика тарихына алтын хәрефтәр менән яҙыласаҡ эштәрҙең береһе булып китә. Был монография 1963 йылда билдәле тюрколог Эрванд Владимирович Севортян редакцияһында донъя күрә. Мәскәү университетында билдәле ғалимдар ярҙамында, үҙенең тырышлығы менән йыйған киң шәрҡиәт белеме (филология, лингвистика, тарих, мәҙәниәт) Ә.Бейешевҡа, ысынлап та, фундаменталь хеҙмәт яҙырға мөмкинлек бирә. Китаптың йөкмәткеһенә, әһәмиәтенә килгәндә, шуны әйтеп китергә кәрәк, тюркология

фәнендә йөҙәр йыл бәхәс тыуҙырған проблемалар бар. Шулар араһында төрки телдәренең ”беренсел” оҙон һуҙынҡылары (урыҫса әйткәндә ”первичные долгие гласные в тюркских языках”) тигән проблема айырым бер урын алып тора.

Билдәле булыуынса, төрки телдәрендә оҙон һәм ҡыҫҡа һуҙынҡылар булған. Был боронғо күренештең ҡалдығын төркмән, яҡут телдәрендә, ҡайһы бер телдәрҙең бәғзе һүҙҙәрендә, формаларында табып була. Мәҫәлән, башҡорт телендәге *ат* (исем, атама мәғәнәһендә) һүҙендәге тамырҙағы *а* оҙон һуҙынҡы булған, ә уның омонимы *ат* (*йылҡы, лошадь* мәғәнәһендә) — ҡыҫҡа *а* һуҙынҡыһы менән килгән тип иҫбатлай ғалимдар.

Оҙон һуҙынҡылар араһында беренсел һәм икенсел һуҙынҡылар булған тигән гипотеза ла бар. Был гипотезаны Рамстед, Педерсен, Лигете, Рясянен, Поппе, Менгес, Габен, Кононовтар яҡлай һәм беренсел һуҙынҡыларҙың бик боронғо икәнлеген дәлилләй. Тюркологияның шундай билдәле ғалимдары менән Әкрәм Ғибаҙулла улы фәнни бәхәскә инә, яҡут, төркмән һәм башҡа ҡайһы бер телдәр материалына таянып, оҙон һуҙынҡылар араһында беренсел һәм икенсел һуҙынҡылар тигән төшөнсә булырға тейеш түгел, ти. Сөнки оҙон һуҙынҡылар барыһы ла өндәр комплексы тартылыуы, ҡыҫҡарыуы арҡаһында барлыҡҡа килгән. Мәҫәлән, шул уҡ *ат* (исем, атама) һүҙендә боронғо тамыр *айт* (әйтеү һүҙе) булған, шунан тартылыу арҡаһында *й* юҡҡа сығып оҙон *а* барлыҡҡа килгән. Бынан тыш, киң тюркологик планда үҙенең ҡарашын дәлилләп, Ә.Бейешев тюркологияны борсоған р~з, л~ш өндәренең сиратлашыуы проблемаһына ла асыҡлыҡ индергән кеше. Эйе, Ә.Бейешев мәшһүр фонетист ине. Әгәр ул ошо юлдан барһа, эштәрен дауам итһә, күптән доктор, профессор, лайыҡлы академик булыр ине.

Әммә 60-сы йылдар башында Ә.Бейешев коллегалары менән башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегенә тотона. Беренсенән, улар XIX быуат аҙағынан һуңғы йылдарға тиклем сыҡҡан бөтә әҙәби, ғилми, ижтимағи-сәйәси баҫмаларҙан, совет дәүерендә баҫылған матбуғаттан, халыҡ ижады ҡомартҡыларынан, архив ҡулъяҙмаларынан, баҫма һәм ҡулъяҙма һүҙлектәрҙән лексик материал туплай, картотека төҙөй. Икенсенән, Ә.Бейешев картотека, аңлатмалы һүҙлек төҙөү принциптарын, фәнни нигеҙҙәрен эшләй башлай. Шулай итеп, ул аңлатмалы һүҙлек темаһының етәксеһе, идеологы, тәүге мөхәррире булып китә. Әлбиттә, уға инде яратҡан фонетикаһын, уйланылған докторлыҡ диссертацияһын ҡалдырып торорға тура килә. Кимәлдәре, характерҙары төрлө булған һүҙлекселәр коллективы менән эшләү, әлбиттә, еңел булмай. Әммә етәксенең фанат, эскерһеҙ булыуы коллективта килеп тыуған ауырлыҡтарҙы еңергә ярҙам итә һәм, ниһайәт, һүҙлек 1993 йылда ”Башҡорт теленең һүҙлеге” тигән исем менән ике томда Мәскәүҙә донъя күрә.

Һүҙлекте ҡулға алғас та, уның нигеҙенә норматив принцип һалынғаны күренә. Унда һүҙҙең һәр бер мәғәнәһе, мәғәнә төҫмөрө айырым аңлатыла, ҡулланылыш үҙенсәлектәре билдәләнә. Шуның менән был һүҙлек башҡорт теленең һүҙ байлығын, уның мәғәнәләр системаһын, стилистик мөмкинлектәрен аса. Һүҙҙең мәғәнәләрен асҡанда

һүҙбәйләнештәр, матур әҙәбиәттән, халыҡ ижады әҫәрҙәренән һәм ваҡытлы матбуғаттан алынған миҫалдар бирелә.

Халыҡ ижады, йола, ғөрөф-ғәҙәт, халыҡ мәҙәниәте, тарихы буйынса ла бик күп материал индерелгән һүҙлеккә. Шулай итеп, был һүҙлек лингвистик һүҙлек кенә түгел, ул этнолингвистик, халыҡ культураһы һүҙлеге лә. Эйе, һүҙлек менән Әкрәм ағай үҙенә, коллегаларына һәм дә телебеҙгә һәйкәл һалды. Быуаттар үтһә лә, был һүҙлек Мәхмүт Ҡашғари, Владимир Даль һүҙлектәре кеүек, киләсәк быуындарға ата-бабаларыбыҙҙың, үҙебеҙҙең күңел байлығын, донъяны танып-белеү үҙенсәлеген, тормош философияһын тапшырыр. Шулай итеп, Әкрәм ағай һәм уның коллегалары был һүҙлек менән халҡыбыҙҙың быуаттар төпкөлөнән килгән рухи байлығын киләсәккә тапшырыу миссияһын үтәне.

Был минутта Иван Буниндың ”Слово” тигән шиғырынан ошо өҙөк иҫкә төшә:

Молчат гробницы,
Мумии и кости,
Лишь слову жизнь дана:
Из древней тьмы
На мировом погосте
Звучат лишь письмена.

Эйе, бөртөкләп йыйылып, ташҡа баҫылған халыҡ һүҙе ошо халыҡҡа, уның теленә һәйкәл ул. Был һүҙлеккә Әкрәм ағай 23 йыл ғүмерен бирҙе. Уны яратып, шул уҡ ваҡытта янып-көйөп эшләне, сөнки телебеҙҙе, башҡорт телен иҫ киткес ярата ине. Быны уның һәр йыл һайын тел тураһында яҙған шиғырҙары ла иҫбатлай. Мәҫәлән, 1966 йылда Ә.Бейешев тел тураһында ошондай һүҙҙәр яҙып ҡалдырған:

Әсәйемде әсәй, илемде ил,
Үҙемде ир иткән —
Һин, телем.
Эйелмәҫ баш, тына белмәҫ йөрәк,
Йәшәр теләк биргән —
Һин, телем.

Һуңыраҡ инде ул: ”Минең телем үлер өсөн түгел, йәшәр өсөн сыҡҡан донъяға...” — тип яҙа.

Киң диапазонлы ғалим, ”халҡым!” тип йөрәге әрнегән шәхес булараҡ, үҙгәртеп ҡороу осоро башланғас, Ә.Бейешев тел проблемалары менән сикләнеп ҡалмай, башҡорт халҡының тарихын өйрәнергә тотона һәм, ниһайәт, 1993 йылда ”Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше” тигән яңы хеҙмәте донъя күрә. Ике өлөштән торған китапта Ә.Бейеш халҡыбыҙҙың 1917 йылға тиклемге һәм 1917 йылдан һуңғы көрәшен һәм яҙмышын яҡтырта, башҡорт күҙлегенән сығып баһа бирә. Күренекле ғалим Р.Фәхретдиновтың ”Һәр халыҡ үҙ тарихын үҙе яҙырға тейеш”, тигән һүҙҙәрен принцип итеп алып, Әкрәм Ғибаҙулла улы был хеҙмәтендә башҡорт тарихын башҡорт күҙлегенән яҙа. Үҙе әйтмешләй, был китапта ул башҡорт халҡының ”көмөш кеүек саф тарих юлын” ғорурланып та, әрнеп тә һүрәтләй.

Эйе, дөрөҫ әйтә Әкрәм Бейешев: ”Башҡорт халҡының тарихында оялырлыҡ, хурларлыҡ бер генә нәмә лә юҡ. Беҙҙең халыҡ бер ваҡытта ла башҡа халыҡтарҙың ерһыуына баҫып инеп ҡан ҡоймаған, бала-сағаһын, ҡатын-ҡыҙын илатмаған. Ул, киреһенсә, үҙе ете быуат ярым буйы баҫҡынсыларҙың йыртҡыслығынан ҡаты ғазап сиккән, йән аямай ғәҙеллек өсөн көрәшкән”. Башҡорт халҡының тарихы, нигеҙҙә, ошо ғазап һәм көрәш тарихынан ғибәрәт икәнлеген күрһәткән үҙенең китабында Әкрәм ағай Бейешев.

Әммә уның китабы тик тарих ҡына түгел, ул киләсәккә йәштәргә бурыс та, мөрәжәғәт тә, оран да.

Эйе, Ә.Бейешев һүҙҙәре менән әйткәндә, халҡыбыҙҙың өмөт йондоҙон ысын ирек ҡояшы итеп ҡабыҙып ебәреү — хәҙерге "быуындың мөҡәддәс бурысы". Был хеҙмәт халҡыбыҙ тарихын аңлауҙа, милли үҙаң үҫтереүҙә бик ҙур роль уйнаны.

1995 йылда донъя күргән "Нация и ленинская национальная политика" тигән хеҙмәтендә В.И.Лениндың милли мәсьәләләргә булған ҡараштарын, уларҙың эволюцияһын тикшереп, Лениндың, СССР-ҙың, Рәсәйҙең милли сәйәсәтенә киҫкен тәнҡит менән сығыш яһай, СССР-ҙың тарҡалыу сәбәптәрен аңлата, Рәсәй сәйәсмәндәренә иҫкәртеү яһай. Ул былай тип яҙа: "Российским правителям и политикам необходимо освободиться от давно изжившего себя в цивилизованном обществе имперского мышления. Силой народы не удержать. Их борьба за свободу будет усиливаться. Будущее всегда за теми, кто борется за свободу". Әкрәм ағайҙың 1990 йылдарҙа яҙған ошо тезистарын билдәле сәйәсмән, Татарстан Президенты Минтимер Шәймиев ауыҙынан 2000 йылда ишетеү Әкрәм Ғибаҙулла улының телсе ғалим ғына түгел, сәйәсмән, ғалим-политолог икәнлеген дә күрһәтә.

Ә.Бейешев заман менән йәшәгән ғалим. Шуға ла йәмғиәттә тел проблемалары барлыҡҡа килгәс, 1999 йылда уның "Тел хикмәттәре" тигән китабы донъя күрә. Был хеҙмәттә ул матбуғат, яҙыусылар теленә анализ яһап, типик хаталарҙы төҙәтеп, башҡорт теленең стилистикаһын камиллаштырыу өсөн тәҡдимдәр индерә. Әгәр бөгөн матбуғатта, конференцияларҙа тел сафлығы, тел культураһы, стилистика, ҡулланылыш проблемалары күтәрелә икән, тимәк, Ә.Бейешевтың китабы халыҡты, журналистарҙы уйландыра, эҙләндерә, эшләргә мәжбүр итә тип әйтеп була.

Ә.Бейешевтың бала сағынан һалынған, үҙе дауам итеп үҫтергән тағы бер һәләтен әйтеп китергә кәрәк тип уйлайым. Ул ғалим-телсе, ғалим-политолог ҡына түгел, иҫ киткес тәржемәсе лә. 1957 йылда әле уның "Ҡытай хикәйәләре" тигән 6 хикәйә-тәржемәһе донъя күрә. Был тәржемәләрҙең теле шул тиклем бай, хатта тәржемә икәнлеген онотоп та китәһең.

2002 йылда Ә.Бейешевтың "Көл аҫтындағы ҡуҙ" китабы донъя күрә. Шиғырҙарында Әкрәм Бейешевтың донъяға, халҡына, теленә булған мөхәббәте, халыҡ яҙмышы тураһында уйланыуҙары, яманлыҡтарға булған нәфрәте, үҙ-үҙен аңларға, үҙенә бирергә тырышҡан баһаһы ла сағылыш тапҡан. Сағыштырығыҙ:

Әллә ниндәй инде минең холҡом,
Була алмайым икеле-микеле.
Көйһәм, көйәм утта көйгән кеүек,
Һөйһәм, һөйәм Мәжнүн шикелле.
Асыуланһам, ябай асыу түгел,
Һәр кемдең үҙ өлөшө...
Сорһоҙ нәфрәт менән сәсәйем,
Һәр хисемде иң юғары нөктә,
Иң ҙур үлсәү менән үлсәйем.

Эйе, Әкрәм Бейешев эскерһеҙ, таҙа күңелле оло шәхес ине. Ул һәр нәмәне йөрәгенә яҡын алып, янып йәшәне. 2004 йылда ул беҙҙең аранан китте. Үҙе теләгәнсә, уны тыуған яҡтарына алып ҡайтып ерләнеләр. Инде рухы тынысланғандыр Әкрәм ағайҙың. Сөнки ул туплаған тел материалдары, ул сығарған оло һүҙлек, яҙған китаптары телебеҙҙе мәңгелеккә илтә.